*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# ИРҘӘР ЭШЕН ҺАЛДЫ ИҢДӘРЕНӘ

Һуңғы тиҫтә йылда коммунистарҙы әрләргә, тәнҡитләргә уғата әүәҫләнеп киттек. Иллә мәгәр уларҙың да төрлөһө булған бит — аттарҙың да була алаһы ла ҡолаһы, тигәндәй. Мин үҙемдең тыуған районымда заманында партия ойошмаһына етәкселек иткән берәү хаҡында һөйләргә йөрьәт итәм. Фәүзиә Әхмәтсәғит ҡыҙы Әбүбәкирова ул.



Был апайҙың үҙен күрмәҫтән алда тәүҙә тауышын ишеттем.

— Ошо Юлдаш ауылы йорттарының һалам баштарын бөтөрмәһәм, исемем Фәүзиә булмаһын!

Өйөбөҙҙөң төпкә бүлмәһенә аласыҡтан һеңлем менән ашыға-ашыға самауыр-сәйнүк индереп килә инек. Өҫтәл артында атайым менән әсәйем янында ултырған ят апай һүҙен әйтеүе булды, муйынындағы ебәк яулығын һура тартып та алды, иҙәнгә осора ташлап та ебәрҙе. Беҙ, йәш ҡыҙҙар, нисек килеп инһәк, әйберҙәребеҙҙе өҫтәлгә урынлаштыра һалып, шулай сығып та киттек: ай күрҙе, ҡояш алды һымаҡ инде. Ят апайҙың исеме, тауышы, әйткән һүҙе күңелемдә уйылып ҡалды шул мәлдән.

Ҡунаҡ киткәс кенә белдем: беҙҙең Федоровка райкомының беренсе секретары Фәүзиә Әбүбәкирова атайым янына, үҙенең күптәнге танышына, төшкә сәйгә тип кенә инеп сыҡҡан икән ул көндө. Шунда биргән дә икән ул ант һүҙен. Ысынлап та, беҙҙең ауыл өйҙәренең күпселеге мин үҫмер саҡта һалам ҡыйыҡлы була торғайны. Ауылда электр уты ла янмай.

Ауылыбыҙҙағы ыңғай үҙгәрештәргә тиҙҙән үҙем дә хайран ҡала башланым. Әкренләп-әкренләп һалам «баштар» ҙа оса башланы, урынына шифер ята. Хатта ҡалай менән дә ябып ҡуйыла түбәләр. Беҙҙең өйҙөң түбәһен дә атайым оҙонсараҡ ҡалай киҫәктәре менән яптырҙы — ҡупшыланды ла китте өйөбөҙ! Өй тигән булам, тотош ауылыбыҙ күркәмләнде лә ҡуйҙы! Мин аңлайым: был — ауылды үҙгәртәм тип, кәпәс урынына яулығын иҙәнгә атып бәргән Фәүзиә апайҙың эше. Уның тураһында ауылыбыҙҙа: «Һай, ир кеше шул Фәүзиә! Һүҙендә торҙо!» — тип ғорурланып һөйләр инеләр.

Йылдар үткәс яҙмыш тағы ла Фәүзиә апай менән осраштырҙы. «Яҡтыкүл» санаторийында путевкам буйынса миңә айырым бүлмә тейеш, ләкин урыныма Мәскәү кешеһен урынлаштырғандар ҙа, мине йәйге алама, уңайһыҙ палатаға ҡыуҙылар. Ошондай тигеҙһеҙлектән гәрләнеп иланым да ебәрҙем. Нисәмә йылдар көтөп алдым бит ул путевканы. Дауахананан дауахանаға йөрөп нығытырға маташҡан һаулығым ошонда, санаторийҙа, хәҙер юҡҡа сыға инде... Ҡапыл бер апайҙың ҡәтғи тауышы яңғырап китте:

— Нишләп балауыҙ һығып ултыраһың бында?

Өс тиҫтә йыл самаһы үткән — тауыш ғәжәп таныш. Фәүзиә апай! Етәксе кеше булғас ни әүәле, әле лә һындыра тотто эште, һәм мин ярты сәғәттән люкста инем инде. Ҡара таңдан, ял итеүселәр тәмле төштәр күргәндә, балыҡсылар ғына күлгә өмөтләнеп өңшәйгәндә, беҙ бергәләп кәмәлә йөҙәбеҙ, көн үҙгендә йәйәүләп Ҡырҡтыға артылабыҙ, күл тирәләй сәйәхәт

ҡылабыҙ, дарыу үләндәре лә йыябыҙ. Апайым ғәжәп йор һүҙле, киң мәғлүмәтле әңгәмәсе икән, шиғырын да һөйләй, йырлап та ебәрә, ә бына ауырыу-һыҙланыу йәки кем ниндәй ҡайғы кисергәнлеге хаҡында телгә лә инеп сыҡманы. «Яҡтыкүл»дән ҡайтып, арыуыҡ ваҡыт үткәс, тетрәндергес хәбәр ишеттем: Фәүзиә апай әллә нисәмә операция кисереп, үлемдән саҡ ҡалған да ошо санаторийға килгән булған икән...

— Шул хаҡта нишләп саҡ ҡына ла ауыҙ асманығыҙ инде, — тип үпкәләргә иткәйнем аҙаҡ, көлдө лә ҡуйҙы:

— Ауырыуыңды, операцияңды һөйләп йөрөп ни! Белмәһендәр! Дуҫтар мине күреп: «Беҙҙең Фәүзиә шәп! Маладис!» — тип ҡыуанһын, ә дошмандарым: «Бирешмәгәс бирешмәй бит мынау», — тип эсе көтөрләһен.

Хәтһеҙ ваҡыт осрашып торабыҙ, телефондан да һөйләшеп алабыҙ апай менән. Уның рухи ныҡлығы көнләштерә инде хатта, ауырлыҡтарҙы ирҙәрсә күтәрә белеүе, кешелекле һәм кеселекле булыуы һоҡландыра. Беҙ шулай гәҙәтләнгән бит: ҙур шәхестең шәхси тормошо юҡ һымаҡ. Нисә йылдар таныш йөрөп тә апайҙы белеп бөтмәгәнмен икән дә...

Май айының бер кисендә ниндәйҙер мәҙәни саранан ашығып ҡайтып киләм. Шығырым тулы автобустағы һауа флоты формаһы кейгән ике ханым иғтибарҙы йәлеп итте. Атаҡ, шуларҙың береһе Фәүзиә апай ҙаһа! Күкрәге тулы орден да миҙал! Бәғзеләрен танырлыҡ түгел, ә бына яуҙа батырлыҡ өсөн бирелә торған Ҡыҙыл Байраҡ орденын танырйым. Хәтәр кеше икән дәһә апаҡайым! Аҙаҡ ул миңә һәр орденын атап күрһәтте: Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы — икәү, «Почет Билдәһе», Хеҙмәт Даны ордендары; бая әйткәнемсә, Ҡыҙыл Байраҡ һәм уның янында — Ватан һуғышы ордендары.

Фәүзиә Әбүбәкирова данлы 62-се армия сафындағы 14-се айырым батальон менән Волганан алып Сталинград һәм Ҡалмыҡ далалары, Белоруссия һаҙлыҡтары аша яу юлдары үткән. Һуғышты Мәскәүҙә ҡаршылай. Әйе, ҡаршылай шул, сөнки ошонда Кредит һәм иҡтисад институтында уҡып йөрөгән була, баш ҡаланы фашистарҙың бомбаға тотоуын үҙ күҙҙәре менән күрә. Уҡыу туҡталғас, талиптар тарала. Фәүзиә апай ҙа мең михнәт менән Горький, Свердловск аша Ырымбур өлкәһендәге Ҡыуандыҡҡа ҡайтып төшә. Ашҡыныуының сәбәбе лы бар: әсәһенең ҡустыһы Әхмәтхажи ағаһын фронтҡа киткәнсе күреп ҡалмаҡсы. Йөрәге һиҙенә — ҡабат күрешә алмаҫтар. Шулай килеп сыға ла: Маликов Әхмәтхажи 1944 йылда һәләк була. Уның ҡәберен Ҡаушан туғандар ҡәберлегенән һуғыштан һуң утыҙ йыл үткәс кенә барып таба Фәүзиә апай.

1921 йылғы аслыҡ мәлендә донъяға килгән ҡыҙ тормош ауырлыҡтарына ҡарамай, ярты йәтим ҡалһа ла (атаһы иртә үлеп китә), белемгә ынтыла: Абҙаҡ, Дәкәтәр мәктәптәрендә уҡый, хатта Мәскәүгә барып етә. Ләкин һуғыш яҙмыштарҙы ҡырҡа бороп ебәрә шул. Фәүзиәне Бикташ ауылына уҡытыусы итеп ебәрәләр, 15 көндән һуң Сурайға күсерәләр. Ҡыуандыҡҡа ара алыҫ — 26 саҡырым, әсәйгә ярҙам итергә кәрәк. Етмәһә, уларға өйҙәшлеккә Киевтан эвакуацияланған 5 кешене ҡуялар. Ғаиләгә әҙерәк еңеллек килтермәмме тип, Фәүзиә апай Ҡыуандыҡтан 2-3 саҡырымдағы заводҡа эшкә төшөргә мәжбүр була. Сурай мәктәбе директоры иһә Әбүбәкированы эштән ебәрә, өҫтөнән ялыу ҙа осора: йәнәһе, мәғариф фронты дезертиры... Бына бер көндө ғәм халыҡ алдында әзмәүерҙәй ир-ат, егерме йәшлек ҡыҙҙың ҡулына бығау һалып, уны заводтан алып китә. Ошо мәлдә әсенеп уйлайым мин: шул сибек ҡыҙҙарҙы «тоторға» ҡуйылған ир-егеттәрҙе нишләп фронтҡа ебәрмәгәндәр икән. Ҡапҡанға бер эләкһәң, ысҡынырмын тимә — Фәүзиә апайҙы ла төрмә-вагонда Ырымбурға килтереп ябалар.

— Өс йөҙләп ҡатын-ҡыҙҙы Ырымбурҙан йәйәүләп алып сыҡҡандарын ғүмерҙә оноторлоҡ түгел, — ти Фәүзиә апай. — Колоннаның ике яғында ла ҡоралы һаҡсылар. Беҙҙе урам тулы халыҡ өнһөҙ оҙата. Тентеп-тентеп, вагондарға тыңҡыслап тултырҙылар ҙа Свердловскиға ҡыуҙылар...

Киевтан эвакуацияланған һәм үҙҙәрендә өйҙәш торған украин ҡатын-ҡыҙҙары, үҙ милләттәштәре араһынан бер юрист табып, Фәүзиәне ҡотҡармаҡтан күп көс һала һәм маҡсатҡа ирешә. Төрмәнән һуҡыр бер тинһеҙ сығарылған Әбүбәкирова вокзалға китә, уйынса — таныштар осрамаҫмы? Осрата. Тап ошонда Мекете кешеләренән ишетә лә инде ул һөйгән, вәғәҙәләшкән егете Рашаттың Ленин-

град фронтында баш һалғанын. «Тәүге һәм һуңғы тапҡыр шунда аҡырып-аҡырып иланым», — тип хәтерләй ул көндө Фәүзиә апай.

Фәүзиәгә һөйгәненең үлем хәбәре шундай тәьҫир итә: ер уйыла, донъя емерелә. Ә бит улар етәкләшеп тә йөрөмәгәндәр, кәртә артына ҡасып үбешеп тә тормағандар. «Йәнәш атлаған мәлдәребеҙҙә арабыҙҙан йөк машинаһы үтерлек ине», — тип хәтерләй хәҙер апай. Шулай ҙа бер тапҡыр арбала йәнәш ултырып ҡайтҡандар икән Ҡыуандыҡҡа. Фәүзиә Мәскәүгә киткән көндө оҙатҡан уны Рәшаты. Шунда ҡыҙ уға вагон тәҙрәһенән шырпы ҡабы ташлай, эсендә өс кенә һүҙ яҙылған ҡағыҙ була: «Мин һине яратам!» Ошо вәғәҙәһенә ғүмерлеккә тоғро ҡала Фәүзиә апай! (Хәҙер ҡайһы бер ҡыҙҙарҙың үҙ егеттәрен ике йылға армияға оҙатып та уларына тоғро ҡалмағаны, ауылда егеттәрен ташлап ҡала-ҡасабаларға ҡасҡан һәм шунда яңғыҙы ҡартайған ҡыҙҙар ғәжәпләндерә мине...)

Ана шул көндө ныҡлы бер ҡарарға килә лә инде Фәүзиә: һөйгәне өсөн үс алырға, фронтҡа китергә! Был юлы инде Медногорсктан тауар поезында һәйбәтерәк вагондарҙа Ырымбурға алып китәләр һәм Сталинградтың утлы дарьяһына ташлайҙар. Һауа киңлеген күҙәтеү, дошман авиацияһы осошо хаҡында хәбәр итеү һәм үҙәк менән элемтә тотоу була Фәүзиәләрҙең хеҙмәте. Ҡола яландағы күҙәтеү пунктында башта ирҙәр торған, шунан уларҙы ҡыҙҙар менән алмаштыралар. 18-20 йәшлек сибек заттар өҙөлгән сымдарҙы ялғай, окоптар ҡаҙа, землянкалар ҡора. Көндөҙҙәрен бинокльдән һәр самолетты күҙәтә, төрөн, осоу бейеклеген, азимутын һәм кемдеке икәнлеген билдәләй. Төндәрен быны тауыштарынан асыҡлайҙар. Аҙыҡ-түлек һәм бүтәнен ташыр өсөн аттар ҙа дөйәләр — башҡа транспорт юҡ.

Ыҙалы, мең ыҙалы яу юлдары! Алыштарҙа ауып ҡалғандарҙы йә ҡаты яраларынан ҡанһырап ятҡандарҙы, йылғаларҙы аша сыҡҡанда һыу төбөнә киткән кешеләрҙе йә аттарҙы, сигенгәндәрендә ҡан илашҡан халыҡты күреүҙән-йәлләүҙән йөрәктәре ярылыр сиккә етә ҡыҙыҡайҙарҙың. Бер саҡ Донды кискәндә, бер һыуланғас йыуынып китәйек тип, Фәүзиәләрҙең взводы артта ҡала. Частҡа еткәс бына этләйҙәр бит быларҙы «дезертирҙар» тип! Взводты икегә бүләләр, һәм Әбүбәкирова Каспий диңгеҙенә яҡын ергә эләгә. Моряктарға ла дошман самолеттары хаҡында хәбәрҙар булыу фарыз бит. Ҡыҙҙарға ашарға етмәй, ә 13 саҡырымда ятҡан диңгеҙҙә балыҡ күп. Тамаҡ тамуҡҡа индерә — Фәүзиә яңылыштан мәкегә төшөп китә, саҡ ҡотҡаралар һәм ауырып-нитеп китмәһен тип араҡыны көсләп эсерәләр. Бығаса ундай нәмәне еҫкәп тә ҡарамаған була.

Ҡалмыҡ далаларында, Уланьхоя районында ҡот осҡос фажиғә шаһиты булырға тура килә уға. Йыялар ҡалмыҡтарҙы — бала-сағаны, ҡатын-ҡыҙҙы һәм ҡарт-ҡороно (ир-егеттәре һуғышта бит). Уҡыйҙар указды. Халыҡты зар илатып, бихисап «Студебеккер»ҙарға тейәйҙәр. Егерме минут эсендә кескәй төйөнсөклө һәм йоҡамоҡа кейемле кешеләрҙе машина күрептәренә ҡатлы-ҡатлы тигәндәй тултырып бөтәләр ҙә алып та китәләр... Һөйләүҙәренсә, Ҡалмыҡстан ҡалмыҡтарҙан өс сәғәт эсендә таҙартылған, депортацияны «уңышлы» үткәргән өсөн совет һалдаттарының (Берия етәкселек иткән НКВД ғәскәрҙәре) түштәрен орден-миҙал биҙәй. «Артабан Чечняны һәм Ингушетияны таҙартасаҡбыҙ», — ти әлеге «яу ҡаһармандары»...

«Ниңә инде үткәндәрҙе соҡорға? Булған да бөткән!» — ошондай ҡарашта тороусылар бөгөн байтаҡ. Эйе, соҡомаҫҡа мөмкин, ләкин ваҡиғалар, уларҙы нисек кенә йәшермә, үҙҙәрен оноттормаясаҡ. Фәһем-һабаҡ өсөн, ғәҙел тарих хаҡы өсөн, киләсәк быуын өсөн.

Ҡыҙ һуғышты Көнсығыш Пруссияла тамамлай. Имен барып етә Мәскәүгә Фәүзиә, ниәте — уҡыуын дауам итеү. Бында институт финанс йүнәлешенә үҙгәртелгән икән, һәм уны өсөнсө курсҡа алмай йөҙәтәләр, әммә ул барыбер үҙенекен итә.

Аслыҡ, яланғаслыҡ, һыуыҡ бүлмәләр... Талиптар төнөн күмер урларға йөрөй. Көндөҙ алмашлап грамлап бүленгән икмәккә сират торалар. Бер заман талиптарға бәхет йылмая: берәр шоколад тараталар, уны ҡыҙҙар ҡурҡа-ҡурҡа (һатырға тейеш түгелдәр) баҙарға сығара һәм аҡсаһына театр ҡарай.

Ауыр талип йылдары ла үтә. Фәүзиә Әбүбәкирова Ҡыуандыҡта банкта практика үткәндән һуң Мәскәүҙә диплом яҡлай ҙа, инглиз телен яҡшы белгәнлектән Халыҡ-ара банкта артабан

уҡырға тәҡдим итеүҙәренә ҡарамаҫтан, Башҡортостанға ҡайта, дәүләт банкына эшкә урынлаша. Бында ла тормош еңелдән түгел: шул уҡ аслыҡ, ялангаслыҡ, подвалдарҙа йәшәү. Иллә мәгәр һуғыш осоро түгел инде.

Әсәһе менән көңгөр-ҡаңғыр йәшәп ятҡан, тырышып эшләп йөрөгән һәм эше буйынса ла апаруҡ үрләгән Фәүзиәнең яҙмышы 1955 йылда ҡырҡа үҙгәрә. Уны утыҙмеңселәр менән ауылға ебәрәләр — партия ҡуша бит. Ауыл хужалығы буйынса айлыҡ курс һәм Шаҡша районында практика үткәс, Әбүбәкированы Абзан районына ебәрәләр. Килеүен килә лә, тик көтмәгәндәр икән уны. Горький исемендәге колхозда унан баш тарталар. «Победа»ға шулай уҡ «кәрәкмәй» икән. Колхозсыларҙан Волкова тигән берәү: «Сомнут ведь ее, ну что она затеяла», — тип дөйөм йыйылышта ҡул ғына һелтәп ҡуя. Һуңынан үҙе яңы рәйес өсөн беренсе булып тауыш бирә.

Ярлының ярлыһы колхоз. Бар мөлкәте Урал, Матрос, Ҡоңғор, Ерән, Братья ҡушаматлы аттар. Ул заманда гектарына 1 центнер ҙа 20 килограмм орлоҡ сәсергә кәрәк, норманы үтәмәһәң — баштан һыйпамайҙар, әлбиттә. Утыҙмеңселәрҙең эшен айырыуса контролдә тоталар. Министрҙар Советы рәйесе әленән-әле Әбүбәкироваға телефондан шылтыратып тора, һөйләшеүҙәрҙең береһендә апай: «Ултырғыс та юҡ бит, исмаһам!» — тип ысҡындыра. Рәйес уны Өфөгә саҡыра ла «Башсоюз» аша машина бүлә һәм ул саҡтағы хаҡ менән 7,5 мең һумлыҡ мебель һәм бүтән кәрәк-яраҡ тейәтеп ҡайтара.

Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа колхоз эшенең ниндәй булғанлығын бөгөн күптәр белә-хәтерләй әле. Фәүзиә апайға бер-береһенән 60 саҡырымда ятҡан бригадалар араһында йөрөргә кәрәк. Мотоцикл йөрөтөргә өйрәнеп ала рәйес. Хужалыҡҡа йә сәсеү, йә мал аҙығы әҙерләү, йә ураҡ һәм башҡа эштәр осоронда ебәрелгән уполномоченныйҙар ныҡ йонсота Әбүбәкированы, сөнки уларҙың «ярҙамы» гәмәлдә күберәк ярҙан этеүгә бәрәбәр. Тура һүҙле апайыбыҙ район пленумында бәрә бит: «Күҙле бүкәндәр нимәгә ул?»

Үҙең иген үҫтереп, икмәккә ас ултырыу — совет осоро «ҡаҙаныштарынан». Бер мәл Фәүзиә Әхмәтсәғит ҡыҙы идара ултырышы йыя ла халыҡҡа эш көнө иҫәбенән 2-шәр кило иген тараттыра. Иртә менән килеп төшкән район советы рәйесе Әбүбәкироваға янай башлай: эшләтерһең колхозсыны хәҙер, йәнәһе... Тағы йыялар идараны, сығаралар ҡарар һәм тиҙ арала дәүләт келәттәренә лә тейешле игенде һалып ҡуялар... Йылайырға үтеп барышлай Өлкә комитеттың беренсе секретары Зыя Нуриев Фәүзиә апайҙың эше менән дә таныша һәм бик ҡәнәғәт ҡала.

1957 йылда Әбүбәкированы Өфөгә саҡыралар ҙа Мәсетлегә райсовет рәйесе итеп ебәрәләр. Бында ул саҡта партия райкомының беренсе секретары Ғилман Яҡупов була. Игенселек өсөн тәбиғәт бик ауыр, таш күп. Таштан юлдар һалдыра Әбүбәкирова. Наҙанлыҡҡа, трахомаға ҡаршы көрәшә. Ҡыҫҡаһы, көнө-төнө эш тә эш. Ошонда күрһәткән хеҙмәттәре өсөн апайҙы Башҡортостандың Юғары Советы депутаты итеп һайлайҙар, партия Өлкә комитетына ағза итеп ҡуялар.

Партия номенклатураһына бер эләкһәң һәм эш күрһәтһәң, тәртип боҙмаһаң, карьера баҫҡыстарынан үрләйһең дә үрләйһең инде ул. Фәүзиә апайҙы ике йыл Мәскәүҙә уҡытып алалар ҙа Балтас районына беренсе секретарь итеп ебәрәләр. Шунан тағы ла Өфө, Өлкә комитеттың бүлек мөдире. Артабан тағы ла районда: Стәрлебаштан Әбүбәкированы Федоровкаға беренсе итеп ебәрәләр. 1972-лә апайҙы Өфөгә, «Башпотребсоюз»ға күсерҙеләр. 1977 йылдан хаҡлы ялда.

Фәүзиә апайҙың тормошо илебеҙ тарихына бәрәбәр булғанғамы, күңелемә шул тиклем яҡын. Ауырлыҡтарға ҡарамай, ирҙәр эшен индәренә һалып, маҡсатлы йәшәй белеүе, иң ғәжәбе — һәр ваҡыт үҙе булып ҡалыуы мине әле лә һоҡландыра, уға ҡарата оло ихтирам, хөрмәт уята.